*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ҮҘ ЙЫРЫ БАР, ҮҘ МОҢО



*Резеда Әминева*

Ул бала саҡтан йырсы булырға хыяллана. Үҙен сәхнәлә, моңло йырҙар илендә күрә. Шуға күрә, өсөнсө синыфта уҡығанда уҡытыусы апаһы: "Үҫкәс кем булырға теләйһең?" — тип һорағас, Резеда Әминова уйлап та тормайынса: "Йырсы булам", — тип яуаплай. Әммә синыфташтарының шарҡылдап көлөп ебәреүе аптырата. Малай-шалайға етә ҡала: "Әртисткә", — тип ирештерергә генә торалар. Шуға ла мәктәптә уҡығанда Резеда башҡаса бер ваҡытта ла хыялын асмай. Бик ҡыҙыҡһынған кешеләргә: "Уҡытыусы буласаҡмын", — ти ҙә ҡуя. Әммә йыр, моң күңел түрендә күптән тамыр ебәргәс, сәскә атмай буламы һуң?! Үҙҙәренең Ғәлиәкбәр ауылындағы һигеҙ йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, артабан Иҫке Собханғолда уҡыуын дауам итә Резеда. Йырсы һәләтен белгән уҡытыусылары уны район мәҙәниәт йортонда даими эшләп килгән үҙешмәкәрлек түңәрәгенә ылыҡтыра. Өлкәндәр менән бергә төрлө абруйлы концерттарҙа ҡатнашып, йырлап йөрөй ул. 10-сы синыфта уҡып йөрөгәндә, һәләтле балаларҙы һайлап алыу маҡсаты менән, Бөрйән яҡтарына йырсы һәм уҡытыусы Рәйсә Әхмәҙиева килеп сыға. Райондың төрлө төбәктәренән балаларҙы мәҙәниәт йортона йыялар һәм йырмонға һәләттәрен тикшерәләр.

— Рәйсә апай минең йырлағанды оҡшатты, — тип хәтерләй Резеда. — Тауышың матур, буйға ғына бәләкәйерәкһең шул, тип ҡуйҙы. Ярар, эш буйҙа түгел, йырыңды халыҡ яратыуы мөһим, тине.

Шулай ихлас һүҙҙәр ишетеп ҡанатланып, мәктәпте тамамлауына Резедаға сәнғәт училищеһына имтиханға саҡырыу ҡағыҙы ла килеп төшә. Был 1982 йылда була. Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо йылда конкурс үтә лә ҙур була — бер урынға ун кеше дәғүә итә.

— Мин уҡырға инермен тип өмөтләнмәнем дә, — тип йылмая

Резеда. — Имтихан тотоусылар араһында һәләтле йәштәр бик күп ине. Шулай ҙа, Бөрйән тиклем ерҙән килгәс, үҙемде һынап ҡарарға булдым. Бәхеткә күрә, өс турҙы ла уңышлы үттем. Миңә бит әлеге көндә киң танылыу яулаған йырсылар, Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыров, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Йәмил Әбделмәнов, ”Йәдкәр” фольклор-эстрада ансамбле йырсыһы Хима Йәнбирҙина, популяр йырсылар Венер Камалов, Харис Шәрипов, Татарстандың атҡаҙанған артисткаһы Зөлфиә Шакирова һәм башҡалар менән бәйге тоторға, артабан бергә уҡырға тура килде. Училищелағы уҡытыусым Флүрә Ноғомановаға ихлас рәхмәтлемен. Беҙгә әсәй кеүек булды, талапсанлығы, дәртләндерә белеүе, үҙ көсөңә, талантыңа ышаныс уятыуы менән беҙгә сәхнә үрҙәрен яуларға, йыр-моң серҙәренә тәрән төшөнөргә ярҙам итте. Әле училищела уҡыған саҡта уҡ ул беҙгә яуаплы концерттарҙа сығыш яһарға мөмкинлек асты.



*Резеда Әминева тормош иптәше Рафак, ҡыҙҙары Айгөл һәм Алина менән*

1987 йылда училищены тамамлаған Резеданы Йәштәр үҙәгенә эшкә саҡыралар. Ошонда Айһылыу Солтанова, Олег Киреевтар менән бергә сығыш яһай башлай йырсы. Артабан ”Авангард” мәҙәниәт йортонда уңышлы эшләп килгән ”Азамат” вокаль-инструменталь ансамбле етәксеһе Әсғәт Насиров үҙҙәренә килергә тәҡдим итә. Бында Резеда оҙаҡ ҡына популяр йырсы Айҙар Ғәлимов менән бергә эшләй.

Тап ошо осорҙа Башҡортостан радиоһында ”Йәш тауыштар” бәйгеһе башлана. Резеда ла унда үҙ көсөн һынап ҡарай һәм 1988 йылда лауреат исеменә лайыҡ була. Уның ”Миләш” тигән йыры (Зәйнәп Бишева һүҙҙәре, Нур Дауытов көйө) тиҙ арала популярлыҡ яулай. Ғөмүмән, Резеда Әминева башҡарған йырҙарҙы халыҡ тиҙ отоп ала һәм яратып йырлай. Заманында Башҡортостан телевидениеһының тамашасылар үтә яратып ҡараған ”Шаңдау” телевизион тапшырыуына ла рәхмәтле йырсы. Иң беренсе тапҡыр ошо программала яңғыраған ”Балан емеше” тигән йыры (Зөһрә Алтынбаева һүҙҙәре, Ғәзиз Дәүләтбирҙин көйө) әле лә радио һәм телевидение аша йыш яңғырай.

— Йырҙы һайлағанда мин иң элек уның һүҙҙәренә иғтибар итәм, — ти Резеда. — Ул кешенең холоҡ-фиғеленә, булмышына тап килергә тейеш. Бөрйәндән булғанғамы икән, миңә тәбиғәткә бәйле йырҙар күберәк оҡшай. Уларҙың

исемдәре үк әйтеп тора: ”Миләш”, ”Балан емеше”, ”Аҡ ҡайындар”, ”Ҡайындар янында” һәм башҡалар. Йырлағанда ошо тәбиғәт күренештәре күҙ алдына баҫа.

Ауыл осонда сәскәле ялан.
Ялан ситендә үҫә бер балан.
Яҙҙарын балан шау сәскә ата,
Әйтерһең уға ап-аҡ ҡар ята.
Йылы елдәр, наҙлы иртәләр
Балан сәскәһен наҙлай, иркәләй.
(”Балан емеше”)

Ошо юлдарға композитор ижад иткән көй ҡушыла, артабан йырсының моңо өҫтәлеп, күңел ҡылдарын сирткән илаһи йыр тыуа.

Йырсының репертуарында популяр композиторҙар Нур Дауытов, Салауат Низаметдинов, Роза Сәхәүетдиновалар ижад иткән йырҙар байтаҡ. Яҡташы, композитор Ғәзиз Дәүләтбирҙин яҙған йырҙарҙы ла тәүгеләрҙән булып Резеда Әминева башҡара һәм уларға киң юл аса.

Резеда халыҡ йырҙарын да оҫта башҡара. Әйткәндәй, бында ла ул башҡа йырсылар репертуарында булған йырҙарҙы ҡабатларға яратмай. ”Орсоҡ”, ”Һыу өҫтө”, ”Таштуғай” кеүек халыҡ йырҙары тап уның башҡарыуында матур һәм үҙенсәлекле яңғырай.

— Быйыл йыр иленә сәйәхәт алыуыма ун һигеҙ йыл тула, — ти Резеда. — Ижадыма байҡау яһап, ҙур ғына концерт программаһы әҙерләйем. Унда әлегәсә репертуарҙа булған йырҙар менән бер рәттән өр-яңы йырҙар яңғыраясаҡ. Был үҙенә күрә бер отчет кеүек. Уҙған йыл миңә ”Башҡортостандың атҡаҙанған артисы” тигән маҡтаулы исем бирелде. Абруйлы баһа ижад дәрте өҫтәне, яуаплылыҡты арттырҙы.

Бына шундай уй-хыялдар менән йәшәй Бөрйән ҡыҙы Резеда. ”Бөрйән иле — йырҙар иле” тигән һүҙҙәрҙе үҙ ижады менән раҫлай. Тыуған ауылы Ғәлиәкбәрҙең хозур тәбиғәтенән, заманында оҫта гармунсы, скрипкасы, бейеүсе атаһынан, халыҡ йырҙарын аһәңле башҡарыусы әсәһенән күскән моңдо халҡына илтә. Әйткәндәй, һеңлеһе Зәбирә лә йырсы уның. Әле Нефтекама ҡалаһында филармонияла уңышлы эшләп йөрөй. Ғөмүмән, ғаиләләрендәге алты ҡыҙ һәм бер малайҙың барыһы ла йыр-моң һөйөүсән булып үҫкән.

Дөрөҫөн әйткәндә, Бөрйәндә йырламаған, бейемәгән кеше бармы икән ул? Үҙенән моң таратып, үҙенә тартып торған төйәк бит Бөрйән. Ана, ҡыҙҙары Айгөл менән Алина ла өләсәләре янына ашҡынып торалар. Әсәләре кеүек йыр-моңдо үҙ итәләр. Алина фортепиано класына йөрөй. Айгөл әсәһенең бөтә йырҙарын отоп бара. Киләсәктә йырсы булмаҫ тимә.

Әле Резеда ”Башҡортостан” дәүләт телерадиокомпанияһында мөхәррир булып эшләй, әммә сәнғәттән айырылмай. Гастролдәргә йыш сыҡмаһа ла, йырсылар бәйгеләрендә әүҙем ҡатнаша, яңы йырҙар өйрәнә, аудиояҙмалар әҙерләй. Маһир йырсылар Мәғәфүр Хисмәтуллин, Абдулла Солтанов, Рамазан Йәнбәков, Фәриҙә Ҡудашеваларҙың ижадын ихлас өйрәнә, оҫталыҡ кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләй.

Йырҙар иле — мөғжизәләр, матурлыҡ, камиллыҡ, оҫталыҡ иле. Был илгә аяҡ баҫҡан кеше унан айырыла алмай. Ошо бейеклектәрҙе бер-бер артлы яулай барып, бар ил, барса халыҡ һоҡланырлыҡ талант ҡаяһына күтәрелә. Резеда ла ошо юлды ҙур табыштар һәм мул уңыштар менән үтер тип ышанғы килә.